*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*

# ТАРЛАП ОСА ҠОШТАР ЗА...

Яҡшы атҡа менеп, ҡулына алған
Уҡ-һаҙаҡҡай тигән ҡоралын,
Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын.
*Башҡорт халыҡ йыры*

Моң йөрәккә үтеп инә, арбай, бөтә ығы-зығыларҙан арындырып, үҙ донъяһына алып инә. Күңелдең иң нескә ҡылдарына сиртә был илаһи моң. Үҙең дә һиҙмәҫтән, моң эйәһе менән бергә һағышланаһың, ғазапланаһың, көйәһең, янаһың. Йырсы йырлап бөткәс тә моң күңел түрендә ҡала, оҙаҡ ваҡыт ҡолаҡта сыңлап тора. Уны тағы ишетәһе, тағы тыңлайһы килә.

...Азамат донъяға моң таратыр өсөн тыуған. Ул башҡарған йырҙар барыһы ла моңло, аһәңле, һәр кем күңеленә хуш килә. "Урал", "Хисам", "Буранбай", "Сибай", "Әрме", "Эскадрон" һәм башҡа халыҡ йырҙарын Азамат йырлағанда төрлө замандағы тарихи ваҡиғалар күҙ алдынан үткәндәй була. Сөнки йырсы бындай киң диапазонлы халыҡ йырҙарын Абдулла Солтанов, Сөләймән Абдуллин, Рамазан Йәнбәков кеүек маһир йырсыларҙан өлгө алып башҡара, һәр бер йырҙың тарихын, асылын белергә, шуны һәр кешегә еткерергә ынтыла.

— Йырсы үҙенең йырҙарының нимә, кем хаҡында икәнлеген белергә, ошо хәл-ваҡиғаларҙы күҙ алдына килтереп, үҙ моңон өҫтәп, халыҡҡа илтергә тейеш, — ти Азамат. — Башҡорттоң бай тарихы бихисап йырҙарҙа сағыла. Ауылдарҙа әле лә киң таралып өлгөрмәгән матур-матур, моңло йырҙар халыҡ күңелендә һаҡлана. Мин ошондай йырҙарҙы өйрәнеп, сәхнәгә алып сығыу, башҡаларға еткереү тураһында хыялланам.

Ниндәй матур һәм изге хыял! Азаматтың был ниәтен тормошҡа ашырасағына шик юҡ. Тауышы моңло, тыны иркен, сәхнә юлы киң һәм оҙон. Халыҡ йырҙарын йырлаусыларҙың ғүмерҙәре лә оҙон була, тиҙәр. Бәләкәйҙән күңеленә һеңгән халыҡ моңдарын килер быуындарға илтеүсе бит ул.

Азамат Тимеров таланттарға бай төбәк — Баймаҡ егете. Семеновск ҡасабаһында тыуып үҫкән. Һигеҙенсе синыфты тамамлағас, Баймаҡ ҡалаһындағы һөнәрселек училищеһында уҡып, электросварщик һөнәренә эйә була. Артабан армия сафында хеҙмәт итә, йылдан ашыу тыуған ауылында һөнәре буйынса эшләй. Әммә һәр ерҙә йыр юлдашы була

уның. Баймаҡ ҡалаһындағы Салауат Юлаев исемен йөрөткән паркта художество етәксеһе булып эшләгәндә сәнғәт һуҡмағы айырыуса әйҙәй Азаматты. Йырлағанын ишеткән, тыңлап ҡыуанған кешеләр уға сәнғәт училищеһына уҡырға барырға кәңәш итә. Әлбиттә, унда йырлатып ҡарағас та һәләтен күрәләр егеттең, әммә документтар теүәл булмай сыға. Шул арҡала тәүге йылы кире ҡайта. Уның ҡарауы, киләһе йылға тулы әҙерлек менән килә Азамат Өфөгә. Тырышлығы бушҡа китмәй, шундуҡ икенсе курсҡа ҡабул итәләр.



*Азамат Тимеров*

Студент йылдары һиҙҙермәй генә үтеп тә китә. Иң ҡыҙығы шунда: училищела Азаматты опера йырсыһы булырға әҙерләйҙәр. Уның Г.Доницеттиҙың ”Мөхәббәт эсемлеге” операһынан ”Неморино”ны, ”Эх ты, Ваня” тигән рус халыҡ йырын һәм башҡа киң диапазонлы әҫәрҙәрҙе оҫта башҡарыуын һабаҡташтары ла, уҡытыусылары ла яҡшы хәтерләй.

— Уҡыуҙы тамамлағас, опера театрына эшкә барырға күңгәйнем инде, — тип йылмая Азамат. — Тап шул мәлдә Сибай ҡалаһында яңы асылған филармонияға эшкә саҡырҙылар. Килеү менән өс бүлмәле фатирҙың асҡысын тотторҙолар. Ә арияларҙы мин әле лә йырлап ебәрәм.

Эйе, башҡорт халыҡ йырҙарын юғары кимәлдә башҡарған йырсы өсөн опера бейеклектәрен яулау һис тә ҡыйын түгел. Сөнки был моңдоң тамырҙары ныҡ һәм көслө, ул олатайҙар, атайҙарҙан мираҫ булып быуындан-быуынға күсә килгән. Азамат та атаһының гел йырлап йөрөгәнен асыҡ хәтерләй. Ошо йырҙар күңеленә һеңгән.

— Мин оло быуын йырсыларын ихлас тыңлайым, — ти Азамат. — Абдулла ағай Солтановтың йырҙары бер кемде лә битараф ҡалдырмайҙыр. Шулай, уның менән тәү тапҡыр осрашҡас, ”Һаумы, Абдулла ағай”, тип барып күрештем. Иң иҫте килтергәне шул булды: ул, мине тауышымдан танып, исемемде атап һөйләшә башланы. Аптырағанымды һиҙҙе буғай. ”Үҙеңә алмашҡа килер кешене нисек танымайһың?” — тип ҡуйҙы. Маһир йырсының оло ышанысы күңелгә ҡыуаныс өҫтәне.

Эйе, һынатмай Азамат. Әле сәнғәт училищеһында уҡыған сағында уҡ ”Яҙғы моңдар” (1991 йыл) бәйгеһендә лауреат була. 1995 йылда

Ҡазанда ”Татар йыры” бәйгеһендә еңеүгә ирешә. 1996 йылда ”Ирәндек моңдары”нда лауреат исеменә лайыҡ була. Бына шулай бер-бер артлы үрҙәр яулай Азамат. Хеҙмәтенә күрә хөрмәте, тиҙәр. 1997 йылда уға ”Башҡортостандың атҡаҙанған артисы” тигән абруйлы исем бирелә.

Эйе, уның сихри моңо үҙ тамашасыларын ихлас ҡыуандыра. Сибай дәүләт филармонияһына килгән көндән алып йырҙары менән ылыҡтыра ул. Халыҡ йырҙарына нигеҙләнгән репертуары бик бәҫле. Ул сәхнәгә сығып йырлай башлаһа, тамашасылар бар яҡтан камил тауышҡа хайран ҡала. Уны электән белгәндәр йырсының артабан ниндәй йыр башҡарасағын көтә, сөнки ”Сибай”, ”Урал”, ”Томан”ды йырлағас, үҙҙәре ятҡан ”Буранбай”, ”Әрме” һәм башҡа йырҙар ҙа яңғыраһа ярар ине был концертта тип өмөт итә. Йырсы иһә ялындырмай, үҙенең йырҙары менән Башҡортостандың һәр тарафындағы, күрше өлкәләрҙәге, сит илдәрҙәге тамашасыларҙы ҡыуандыра, йыр-моңға һөйөү уята.

Ниндәй йыр ул ишетелә тауҙарҙа,
Ишетелә ергә әллә ҡайҙарҙан?
Күңелдәрҙе, ай, ҡалдыра, ҡуҙғыта,
Яҡты уйҙар, яҡты уйҙар уйлата.

Был йыр минең мөхәббәтем тураһында,
Минең керһеҙ мөхәббәтем тураһында,
Минең наҙлы мөхәббәтем тураһында,
Минең сикһеҙ мөхәббәтем тураһында.

Азамат эстрада йырҙарын да берҙәй оҫта башҡарыусы йырсы. Уның ”Мөхәббәтем тураһында йыр”ы (С.Рахай һүҙҙәре, Х.Дәүләтов көйө), ”Мин ҡабаттан тыуыр булһам” (М.Кәрим һүҙҙәре, Х.Дәүләтов көйө) һ.б. тыңлағанда ирекһеҙҙән күҙгә йәш эркелә, күңел тула.

Әммә нисек кенә булмаһын, Азамат башҡарған халыҡ йырҙары айырыуса мәртәбәле яңғырай. Танылған яҙыусы Таңсулпан Ғарипованың: ”Ирәмәлдә — Абдулла Солтанов, Ирәндектә — Азамат Тимеров”, — тип әйтеүендә тәрән мәғәнә бар. Эстрада йырын күп йырсы йырлай алһа, халыҡ йырын ошолай юғары кимәлдә башҡарыусылар бармаҡ менән генә һанарлыҡ.

## Нәсимә

Нәсимә сәхнәгә биш йәшендә ”Бишбармаҡ” бейеүе менән сыға. Орсоҡтай өйөрөлөп, күбәләктәй осоп йөрөгән бәләкәй ҡыҙҙы алҡышҡа күмәләр. Артабан мәктәптә уҡығанда сәхнәнән төшмәй тиһәң дә була. Темәс мәктәбендәге иң оҫта бейеүсе, йырсы була Нәсимә. Мәктәпте

тамамлағанда киләсәктә мотлаҡ бейеүсе булырға ҡарар итә ҡыҙыҡай. Әммә ағаһы — профессиональ бейеүсе Рәфҡәт Юнысов кире бора хыялынан.

— Ағайымдың һүҙен атайым менән әсәйем дә хуплап ҡуйҙы, — тип иҫкә ала Нәсимә. — Бына шулай ҡапыл, бейеүсе булам тип үҫтергән оҙон ҡара толомдарымды ҡырҡып ташланым да бухгалтерлыҡҡа уҡырға киттем. Училищела уҡығанда Өфөлә уҙған йәш йырсылар бәйгеһендә беренсе урынды яуланым. Ошо еңеү сәнғәт иленә юл алырға әйҙәне лә инде. "Һәүәнәк" совхозында бер йыл эшләгәс, Өфө сәнғәт училищеһына юлландым. Әйткәндәй, Азамат менән беҙ училищела уҡығанда осраштыҡ һәм ҡауыштыҡ.



*Нәсимә Тимерова*

Нәсимә лә Баймаҡ ҡыҙы, Әмин ауылында ишле ғаиләлә тыуып үҫкән. Атаһы — оҫта гармунсы, әсәһе йырсы булғас, өйҙәрендә көн дә концерт ҡуялар. Әсәһе милли кейемдәрҙе матур һәм таман итеп кенә тегеп кейҙерә. Бейемәҫ ерҙән бейеп китерһең. Ә бына йырсы булып китеүе үҙе бер йомаҡ. Әммә йыр күңелгә бер ҡунһа, ул талпынып ҡына тора, йырламай мөмкин түгел.

Шулай сәнғәт училищеһында йыр, сәхнә серҙәрен үҙләштереп, Азаматы менән Сибай филармонияһына эшкә ҡайталар. Ҡала хакимиәте фатир ҙа биргәс, ҡыуанышып сәнғәт донъяһына сума улар.

Бында береһенән-береһе сағыу сәхнә йондоҙҙары менән бергәләшеп, сәмләнеп ижад итә Тимеровтар. Йырсыны халыҡ баһалай, уңыштарын да, етешһеҙлектәрен дә энә күҙенән үткәрә. Әммә иң элек йырсы үҙенә талапсан булырға тейеш. Азамат Тимеров кеүек талантлы йырсы менән бергә, ҡайһы ваҡыт ул йырлағандан һуң сәхнәгә сығыу еңел булмағандыр Нәсимәгә. Ни тиһәң дә, уға бит Азамат яулаған алҡыштарҙы кәметмәҫкә, ошо бейеклекте түбәнәйтмәй сығыш яһарға, бар оҫталығын һалып йырларға тура килгәндер.

— Азаматтың сығышын халыҡ ихлас ҡабул иткәнгә ысын күңелдән ҡыуанам, — ти Нәсимә. — Мин ошо талантлы йырсының ҡатыны бит, тип ғорурланам. Халҡыбыҙҙың ғәжәйеп моңло, аһәңле йырҙарын барса матурлығы менән, юғары кимәлдә башҡарыусылар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Азаматҡа был талант Хоҙай тарафынан бирелгән, сөнки халыҡ йырҙарын башҡарыу өсөн моң да, оҙон тын да, рух көсө лә, күңел байлығы ла булыу зарур.

Мин үҙем ”Зөлхизә”, ”Ҡәкүккәй”, ”Томан”, ”Йәмәлекәй тауы”, ”Шәүрә” кеүек халыҡ йырҙарын үҙ итәм. Эстрада йырҙарына килгәндә, мин һәр йырҙы ла йырлап бармайым, күңелемә оҡшағандарын һайлап алырға тырышам. Композиторҙар Зөһрә Усманова, Юлай Үҙәнбаев яҙған йырҙар оҡшай. ”Тамсы, там”, ”Ландыштар”, ”Эй, ғәзиз ҡалам” һәм башҡа йырҙарҙы яратып башҡарам.

Эйе, уңыш тырыштарға килә. Нәсимә лә Хоҙай биргән талантын һүрелтмәй, киреһенсә, байыта бара. 1998 йылда ”Ирәндек моңдары” бәйгеһендә 1-се урын яулаһа, 2000 йылда ”Урал моңо”нда дипломға лайыҡ булды. 2003 йылда Азамат менән икәүләшеп Ҡырғыҙстандың баш ҡалаһы Бишкәктә уҙған ”Иссык-Куль—2003” эстрада йырҙары халыҡара фестивалендә диплом яуланылар.

— Ҡырғыҙҙар беҙҙең сығышты бик оҡшатты, — ти Нәсимә. — Өрәңы милли кейемдәребеҙгә, уңышлы сығышыбыҙға һоҡланып ҡалдылар. Ә Ош ҡалаһындағы филармония директоры беҙҙе махсус саҡырырға ниәтен белдерҙе.

Бына шундай ул Нәсимә Тимерова. Сәхнәлә оҫта һәм сибәр йырсы, иренә ихлас ҡатын, улдары Урал менән Арыҫланға наҙлы әсә.

Әйткәндәй, Урал да сәнғәткә ынтылып үҫә. Әле тырыша-тырыша баянда уйнарға өйрәнә. Ата-әсәһенең йыш ҡына гастролдә йөрөүенә лә күнеккән. Уларҙың йыр-моң донъяһында ҡайнап йәшәүе бәләкәйҙән күңеленә күскән. Азамат үҙе бына нимә ти:

— Урал улымда ла халыҡ йырҙары менән ҡыҙыҡһыныу бар. 2002 йылда ”Ирәндек моңдары” бәйгеһендә үҙен һынап ҡараны ла инде. Минең йырҙарым иһә унын күңел түрендә ҡалыр, тип ышанам. Йылдар үтеп, ғаилә ҡорһа, балаларына ошо йырҙарҙы өйрәтер, тип уйлайым. Йырҙарыбыҙҙа халыҡ тарихы, халыҡ аҡылы, уларҙы онотмаҫҡа, юғалтмаҫҡа тейешбеҙ. Ил яҙмышы, тел яҙмышы йыр яҙмышына ла бәйле.

Нәсимә иһә Азаматтың был һүҙҙәрен хуплай ғына. Аҡыллы, иғтибарлы, итәғәтле тормош юлдашы менән ғорурлыҡ хисе йылдан-йыл арта ғына. Сәхнәлә лә, ғаиләлә лә һәр саҡ терәк, таяныс була белгәне, кәрәк саҡта хәлен аңлауы өсөн бар булмышы менән рәхмәтле.

## Тимеровтар

Студент йылдарында тыуған ғаиләләр ныҡлы, бәхетле була, тиҙәр. Был ысынлап та шулайҙыр. Азамат менән Нәсимәнең ғаилә ҡороп йәшәй башлауҙарына тиҫтәнән ашыу йыл үтеп тә киткән. Әле генә Өфө урамдарында етәкләшеп йөрөгән кеүектәр ине. Ана, хәҙер улдары Уралды етәкләп, Арыҫланды балалар арбаһына һалып, Сибай урамдарын буйлайҙар. Осраған һәр кеше баш ҡағып иҫәнләшеп уҙа. Пар

күгәрсендәр кеүек гөрләшәләр үҙҙәре. Ижад кешеһе өсөн халыҡ ихтирамын яулауҙан да юғары баһа юҡтыр ул. Сибай ҡалаһында, Башҡортостаныбыҙҙың һәр тарафында Нәсимә һәм Азамат Тимеровтарҙы яҡшы беләләр, сығыштарын көтөп алалар. Ул ғына ла түгел, күрше өлкәләрҙә лә ихлас үҙ итеп ҡаршы алынған ҡунаҡтар улар. Франция, Төркиә, Греция илдәрендә лә һәр йырҙары алҡышҡа күмелде. Сәхнә бәйгеләрендә бергәләшеп көс һынашалар, тормош йөгөн уртаҡ тарталар, шуға ла бер эш тә ауыр булып тойолмай. Булмыштары ауылдан, шуға ла һәр эш ҡулдарынан килә: кәрәк икән, бесән дә сабалар, утын да әҙерләйҙәр. Ата-әсәләренең хәлдәрен даими белешеп, ярҙам итеп йәшәйҙәр. Нәсимә йырға маһир булған кеүек, аш-һыуға ла оҫта. Милли аштар менән бер рәттән, бығаса татып ҡарамаған аҙыҡты бешереп ҡарарға ярата. Һис тә һынатҡаны юҡ.



*Нәсимә һәм Азамат Тимеровтар йырлай*

Бына шулай парлашып, гөрләшеп йәшәүгә ни етә?! Йырлаған дуэт йырҙары йәштәрҙең күңел түрендә һөйөү осҡоно ҡабыҙһа, өлкән йәштәгеләрҙең йөрәк ҡылдарын сиртеп, инде бер аҙ һүрәнәйә барған саф хистәрен өр-яңынан тергеҙә. Халҡыбыҙҙың яратҡан йырсылары булыу, талантыңдың лайыҡлы баһа алыуы, үҙеңдең тыуған төйәгеңә, илеңә бәҫ өҫтәүеңде тойоу — артист өсөн иң мөһиме. Нәсимә һәм Азамат Тимеровтар тап ошондай абруйлы йырсылар. Бына тиҫтә йылдан ашыу үҙ тамашасыларын йырҙары, һоҡланғыс ижад емештәре менән ҡыуандыра улар. Киләсәктә был уңыштарҙың тағы ла мулыраҡ, сәхнә үрҙәренең күп буласағы шикһеҙ. Йырсылар халыҡ араһында тыуып үҫә һәм уның күңел тетрәтерлек, ҡанат ҡуйырлыҡ гүзәл йырҙарын киләсәккә илтә.

Әйткәндәй, уҙған йылдың декабрь башында баш ҡалабыҙ Өфөлә Башҡортостан Республикаһы филармониялары фестивале уҙҙы. Сибай дәүләт филармонияһы унда ”Иманымда — рух һәм ирек” тигән күркәм концерт программаһы менән сығыш яһаны. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы Азамат Тимеров ошо бәйгелә үҙенең Сибай филармонияһының йөҙөк ҡашы булыуын тағы бер раҫланы, моңло тауышы менән тамашасыларҙы ихлас ҡыуандырҙы.